

*Лариса АБДУЛЛИНА*

# ”Эске аңда мең төр уй ята...”

## Өфөмә

Һин Париждай башҡорт балаһына —
Яулау өсөн юлдар бик ырау.
Ҡыйыуһыҙлыҡ, ҡаушау онотола,
Әрнеү арттарында мең һорау.
Йөҙмәсә-йөҙ ишек асылып та,
Асылырға мөмкин бер күңел.
Ғорур Өфө, һинең тәкәбберлек
Башҡорт күңеленә тиң түгел.
Һиңә килгән һинән китә алмаç —
Өфө сире йоға, һис шикһеҙ.
Ингәндә лә ишек булмағандай,
Сығыр юлдарым да ишекһеҙ.
Һиндә күпме хис-тойғолар ҡайнай,
Хәл ителә күпме яҙмыштар?!.
Изгелектәр һәр саҡ баһаланмай,
Кисерелмәй күпме яңылыштар.
Һин Париждай башҡорт балаһына
(Ә Парижды башҡорт яулаған).
Күңелдә — сәм,
Йөрәктә — йыр, моң бар,
Шоңҡар рухы кейек аулаған!

## Һуңғы өмөт

Таңдан тороп ҡорбан салған төçлө,
Йырҙарымды утҡа ташланым.
Хушығыҙ, һеҙ, әрнеү-ғазаптарым,
Яңы миҙгелемде башланым.
Ут — ут инде.
Тере хисем, ана,
Ялҡын булып бейей усаҡта.
Һис иламай түҙә белдем әле —
Сабыйымды ҡыçып ҡосаҡлап.
Утлы хистең һуңғы тантанаһы —
Бейе, әйҙә, бейе шашынып.
Иçләйһеңме, йәйғор булырһың тип,
Һиңә күпме өмөт ташыным.
Иçләйһеңме, өмөтләнмәç сакта
Өмөт бирҙе кескәй сабыйым.
Һин бит йәнде убып ингән һағыш,
Күңел биләүеңдән таныйым.
Һин ҡороған ағас төçлө булдың —
Ашыҡманың япраҡ ярырға.
(Күпме мөмкин ауыр тойғоларҙы
Ауыр итеп алып барырға?!)
Бына-бына ҡағыҙ янып бөтөр.
Ауыр уйҙар, инде хушығыҙ!
Күңелемдә түгел, ошо ерҙә,
Хыялдарым — ҡәбер ташығыҙ.

***

Тупылдашып, тупылдашып
Йүгерешә сабыйҙарың!
Был донъяла урындарын
Табырҙар ул, табырҙар ул.
Һиндә — ялҡын, миндә — ялҡын.
Улар балҡып янырҙар ул.
Йөрәктәге ялҡын аша
Был донъяны танырҙар ул.
Әле туптай тубырсыҡтар
Аҙаҡ уйға һалырҙармы?
Үҙҙәре үк һалған уттан
Үҙҙәре үк алырҙармы?
Тубырсыҡтай сабыйҙарым.

***

Ҡайҙан ғына көс табырға икән?
Көсһөҙмөн, тип әйт һин, бар, ана.
Һүҙ башлаған икән берәү бер көн —
Яраһында һаман ямана.
Ҡайҙан ғына наҙ алырға икән?
Балаларҙан, тимә, был ялған.
Һин йыраҡтан ғына йылыт мине,
Тулҡынымды эҙләп табалһаң.
Бына әле һинән бер ни килмәй.
Һүрелерҙәй генә сағымда
Ҡырҡ сыраҡтың бер(е)һе тоҡана ла
Үҙ-үҙемә ҡайтам тағын да.
Боронғолар дөрөҫ әйткән, беләм,
Никахтар ул күктә ярала.
Шулай булмаһа һуң һинең һағыш
Йөрөр инеме ни һағалап?!.
Ай тотолған төндөң күле кеүек,
Ярға ҡайтам, китәм. Ҡурҡыныс!
Һис күнмәҫлек түгел, саралар юҡ,
Хафаланма, йәнә мин тыныс.

## Аҫабалар рухы

Оло һағыш ояланы миңә
Үҙ-үҙемде белә-белгәндән.
— Әсәй, әйтсе, ирек өләшеүсе
Түгел микән анау килгәндәр?!
Ниндәйерәк булды икән урман
Ата-бабам һунар сыҡҡанда?
Хәҙер бармы айыу йыҡҡан ирҙәр,
Суҡмар менән бүре һуҡҡандар?..
Ирҙәрме ни?
Айыу ҡалды микән?
Ҡалды микән тоғро бүреләр?
Тәбиғилек, ғәрлек кеүек хистәр
Минең хәтеремдә тереләр.
Аҫабалар рухы йәшәй миндә,
Эске аңда мең төр уй ята.
Ете төндә уйламаҫлыҡ уйҙан
Ете тапҡыр рухым уята.
Тәбиғилек хәҙер ғәрлекме ни?!
Ихласлыҡтың юҡмы хаҡтары?!
Намыҫ һатылһа ла, улар һис юҡ,
Эҙләһәң дә баҙар аҡтарып.
Юҡ, кәрәкмәй сәнске-бысағығыҙ,
Биш бармаҡлап тәмле бишбармаҡ.
Европаға табан ынтылдыҡ та,
Ҡаранымы беҙгә ул ярап?!
Минең халҡым башлап яу сапмаған.
Изге булған уның көрәше!
Ерһеҙҙәргә үҙе ер биргән дә,
Булған малын бүлгән өләшеп.
Аҫабалар рухы йәшәй миндә —
Аҡһаҡалдай сабый Ватаным!
Теләһәгеҙ шул тәбиғи илгә
Аҡбуҙатта алып ҡайтамын.
Килер бер көн.
Рухы ныҡлы ҡалыр.
Рухиәттә йәшәр ул халыҡ.
— Аҫабалар беҙҙе һаҡланы! — тип,
Әйтер улар рухҡа таң ҡалып.

